# Урал батыр

## Башҡорт халыҡ эпосы

### 8-се бүлек

Дүрт егеттең был һүҙен
Урал батыр ишеткәс,
Балалары үҫкәнен,
Батыр булып еткәнен
Үҙ күҙе менән күргәс,
Урал батыр ҡыуанған,
Ғәйрәте тағы артып,
Аҡбуҙатҡа атланған,
[Аталы-уллы биш батыр,
Бер-береһенә иш батыр,
Йәнә баяғы дүрт батыр]
Дейеүгә яу башлаған,
Ҡыйратып ташлаған.
Ай һуғышҡан, ти, былар,
Йыл һуғышҡан, ти, былар
Ҡаты яуҙың береһендә
Ҡәһҡәһәне ҡолатҡан -
Диңгеҙ ярып, дулатҡан,
Асы тауыш сығартҡан,
Күк күкрәтеп, олотҡан,
Кәүҙәһен өйөп, диңгеҙҙә
Тағы бер тау яһатҡан.
Тылсымлы Шүлгән диңгеҙе
Ҡап урталай быуылған,
Һыуҙа йөҙгән дейеүҙәр
Ике яҡҡа бүленгән.
Шүлгән йүнгә килмәгән,

Ни эшләргә белмәгән,
Үҙ яғында ҡалғандың
Барыһын бергә йыйнаған,
Урал тағы юл сапҡан,
Дейеүҙәргә яу асҡан.
Ҡаты яуҙар барғанда,
Күктә уттар бөркөлөп,
Диңгеҙ һыуы эркелеп,
Һыуҙар ҡайнап торғанда,
Шүлгән, Урал икәүһе
Бер-береһенә тап булған
Икәү-ара яҫҡышып,
Төрлө яҡлап алышҡан.
Таяғы менән Уралға
Шүлгән яман уҡталған -
Утҡа өтмәксе булған,
Башына етмәксе булған.
Урал һис тайшанмаған,
Булат ҡылысын алып,
Ҡаты айбарын һалып,
Серле таяҡҡа сапҡан, -
Таяҡ киткән сәсрәп,
Күктә тауыш күкрәп,
Дингеҙ бөтөп, күл булған
Һыуһыҙ ҡалып дейеүҙәр,
Кәре китеп хур булған.
Урал тотҡан Шүлгәнде,
Аҡбуҙаты, улдары
Ҡырған дейеү, бүтәнде.
Көсө менән Шүлгән дә
Уралға кәр ҡылмаған,
Алышһа ла, түҙәлмәй,
Шунда ергә ҡолаған,
Һаҡмар килеп Шүлгәнгә

Ҡылыс менән уҡталған;
Урал тыйғас, Һаҡмар ҙа
Сапмайынса, туҡталған.
Урал халыҡты йыйған,
Шүлгәнде уртаға ҡуйған.
"Йәштән яуыз үҫтең һин,
Урлап ҡан да эстең һин -
Атам һүҙен тотманың,
Яуызлыҡҡа ыҡланың,
Яҡшылыҡты ташланың.
Ҡанда йөҙҙөң яуың менән,
Ил ҡапланың һыуын менән
Ил үртәнең утың менән.
Дейеүҙәрҙе дуҫ иттең,
Кешеләрҙе үс иттең;
Яуызлығың ат иттең,
Йөрәгеңде таш иттең,
Атам йөҙөн ят иттең,
Әсәм һөтөн ыу иттең.
Юлда юлдаш булдым мин,
Яуҙа ҡулдаш тинем мин;
Ҡыҙ һайланың - буй ҡуйҙым,
Ат һайланың - яй ҡуйҙым;
Дан эҙләргә теләнең -
Теләгеңә юл ҡуйҙым.
Ҡулыңа таяҡ тотторҙом, -
Яҡшылыҡтан күҙ йомдоң,
Ҡан ҡойорға ынтылдың;
Илде утта ҡалдырҙың,
Күпте һыуға батырҙың,
Дейеүҙәргә алданып,
Кеше ҡаны түктерҙең,
Һөттәй таҙа берәүҙең -
Күҙ ҡаралай икәүҙең

Берен димләп бирҙерҙем,
Йөрәген аҡ булыр, тип,
Һине маҡтап һөйҙөрҙөм,
Һин һүҙеңдә торманың,
Яҡшыға юл борманың,
Атам һүҙен тотманың,
Әсәм һүҙе йоҡманы.
Бөтә илде һыу иттең,
Кеше ҡанын ҡойорға
Дейеүҙәрҙе өҫкөттөң;
Ер өҫтөн дә эркеттең,
Тигеҙ ятҡан ер йөҙөн
Онҡар-шоңҡар иттерҙең.
Яманлыҡты яҡшылыҡ
Еңгәнен хәҙер белдеңме?
Кешеләрҙең донъяла
Өҫтөнлөгөн күрҙеңме?
Инде бөтә дейеүең
Йәнлеккә төйәк тау булыр,
Ҡәһҡәһәнең яуҙары -
Аяҡһыҙ ҡалған яу булыр.
Ер үбеп ант итмәһәң,
Кеше алдында баш эйеп,
Аҡ һүҙеңде бирмәһәң,
Кешеләрҙең күҙ йәшен
Үҙ өҫтөңә алмаһаң,
Атам менән көрешкәндә,
"Ғәйеплемен", - тимәһәң, -
Башын сарҙай сорғотоп,
Он-талҡандай итермен;
Күбәләктәй йәнеңде
Төнгө томан ҡылырмын;
Ҡаныңа буяп кәүҙәңде,
Әзрәҡәнән бар булған,

Ямантау тип аталған
Тауға илтеп күмермен.
Башыңа йән килмәҫтәй,
Килеп хәлең белмәҫтәй,
Яҡшылап телгә алмаҫтай,
Бер үлән-зат үҫмәҫтәй,
Бите көнгә ярылған,
Ҡасҡан-боҫҡан йыланға,
Яуыз уйлы бөркөткә,
Ҡан көҫәгән ҡоҙғонға
Ҡунып, йәнлек аңдырға
Яуыз тағы булырҙай
Ҡара ҡая итермен", -
Тигән һүҙен Уралдың
Шүлгән тыңлап торған да,
Урал ҡуймаҫ, үлтерер, -
Тип, йөрәге ҡурыҡҡан да:
- Үҙ тылсымым яһаған
Диңгеҙемдең ҡалдығы,
Уҫаллығым шомлоғо
Күлдән битем йыуайым;
Һис яуызлыҡ ҡылмаҫҡа,
Йоланан баш тартмаҫҡа,
Һинең менән берлектә,
Кешеләр менән дуҫлыҡта
Ил батыры булырға,
Илдә тыныс ҡалырға,
Урал, юлың үбәйем;
Ысын туған булайым,
Бергә торлаҡ ҡорайым,
Атам-әсәм күрәйем,
Уларға һүҙ бирәйем.
- Ҡандан үҫкән бит итең
Күлдә йыуып таҙармаҫ,

Ҡанһыраған йөрәгең
Яҡшылыҡҡа баҫалмаҫ;
Ҡанда йөҙөп, ут йотҡан
Кеше һине ишкә алмаҫ;
Кешегә асыу тарҡыған,
Ҡәһәрҙә таштай ҡатырған,
Яҡшыға ҡаршы ут булған,
Бәғерлектең тоҡомо
Тыумыштан уҡ юҡ булған
Һинең ыулы йөрәгең,
Таш иреһә лә, иремәҫ,
Якшылыҡты тиңһенмәҫ,
Кешеләрҙе ишһенмәҫ.
Кешеләрҙе һөйһәң һин,
Бергә йәшәп, ил ҡороп,
Батыр булам, тиһәң һин,
Кешеләргә дошманды
Үҙеңә ҡаршы яу һана,
Дошман ҡанын күл итеп,
Битен йыуыр һыу һана.
Кешеләргә яу асып,
Буштан-бушҡа ҡан ҡойоп,
Яуызлыҡты дан һанап,
Яҡшылыҡты хур яһап,
Олпатланып, маһайып,
Кәперәйгән тәнеңде,
Ҡарайып бөткән ҡаныңды, -
Үткәнеңде уйлатып,
Йөрәгеңде һыҙлатып,
Тәнең һыҙлап ҡағайһын,
Йәнең һыҙлап ағарһын,
Йөрәгендәге ҡара ҡан
Кибеп, ҡабат ҡыҙарһын, -
Шунда кеше булырһың,

Илдә бергә ҡалырһың,
Яуҙа батыр булырһың", -
Урал шулай тигән һуң,
Шүлгән ҡабат һораған,
Үҙ теләген һөйләгән:
"Һыбай йөрөгән арыҫланым
Ике һөрөнөп абынды,
Ике тапҡыр һуғылды,
Тәнендә ҡандар күренде,
Күҙенә уттар сағылды, -
Аяғыма йығылды.
Өсөнсө тапҡыр һөрөндө -
Миңә ҡарап үкенде,
Ҡабат инде һөрөнмәм,
Тип, арыҫланым елкенде.
Мин да ҡабат һуҡманым,
Телем менән һүкмәнем.
Ағаң булған Шүлгән дә
Ике тапҡыр юғалды,
Һөрөнгән арыҫландай,
Күңеләңә шом һалды.
Өсөнсөгә - китәйем,
Дейеүҙе тар-мар итәйем;
Ҡара йөҙөм йыуайым,
Аҡ йөҙ менән алдыңа
Килеп, ерҙе үбәйем,
Кешеләргә иш булып,
Бергә торлаҡ ҡорайым".
[Урал тынламаҡ булған,
Һуңғы ҡат һынамаҡ булған:]
"Намыҫ тапар ир булһа,
Өмөтө булмаҫ көнөнән;
Ил быуынын һанаған
Көнөн айырмаҫ төнөнән:

Йыртҡыс булған йәндәргә
Ҡара төнө көн булыр,
Күҙе ҡалғыр байғошто
Төндә аулап, шат булыр.
Кешеләргә төн ине,
Һиңә яҡты көн ине.
Ҡалғып торған кешене
Ҡырып, ҙур дан дауланың,
Кешегә дошман дейеүҙе
Үҙеңә дуҫ һайланың;
Кешенең ҡара төнөндә
Айы ҡалҡыр тимәнең,
Айы батһа, таң атып,
Көн балҡырын белмәнең.
Инде күрҙек күҙ менән
Кешегә көн килгәнен,
Дейеүең менән үҙеңә
Ҡара төндөң килгәнен;
Дейеү йөҙгән диңгеҙҙең
Ергә әйләнеп ҡалғанын,
Әзрәҡә тигән батшаңдың
Ҡаялы тау булғанын;
Уҫал да менән аҡ ҡыҙҙан
Һаҡмар батыр тыуғанын;
Йылан ейгән ирҙәрҙең,
Унда бикле ҡыҙҙарҙың
Көләс йөҙлө булғанын,
Алдыңа килеп тыуғанын
Инде күреп, ышанһаң;
Кешегә ҡаршы сайҡашып,
Яуызлыҡтан яу асып,
Мәңге еңәлмәҫеңде,
Бер туҡталып уйлаһаң,
Уҫаллығыңа баш булып,

Кешелекте һайлаһаң,
Үҙ арыҫланың һүҙенән
Өлгө алырлыҡ булһаң, -
Мин дә бер юл ҡуяйым,
Һинән яҡшылыҡ көтәйем.
Атамдың хаҡы өсөн,
Әсәмдең хәтере өсөн,
Тағы ла бер һынайым,
Теләгеңде бирәйем".
Шүлгәнде шулай оҙатҡас,
Урал халыҡты йыйҙыртҡан да:
"Күҙгә күренер Үлемде
Илдән ҡыуып юҡ иттек,
Ҡан эсеүсе дейеүҙең
Барын ҡырып тау иттек.
Йәншишмәнең бар һыуын
Һоҫоп алып киләйек.
Бар кешегә бирәйек.
Күҙгә күренмәҫ Үлемдән -
Килер ауырыу-сырхауҙан,
Ауыртыныу-һыҙлауҙан
Кешеләрҙе ҡотҡарып,
Барыһыны шат ҡылып,
Мәңге үлмәҫ ҡылайыҡ",-
Тип, Урал һүҙ асҡанда,
Аһ-ваһ итеп зарланып,
Үлем саҡырып-ялбарып,
Бар һөйәге ҡаҡшаған,
Тәнендә ит ҡалмаған,
Ата-әсә, берен дә
Кем булғанын белмәгән
Бер ҡарт килеп еткән, ти,
Ошо һүҙен әйткән, ти:
"Бик күп быуын күрҙем мин,

Бик күп ерҙә булдым мин,
Һис нәмәне тоймаған,
Бер нәмәнән ҡурҡмаған,
Бала - атаһын белмәгән,
Ата - балам тимәгән
Осорҙо ла күрҙем мин;
Кешеләр бергә тупланып,
Үҙ-araһы йопланып,
Көслө ырыуҙар көсһөҙҙө
Талауын да күрҙем мин;
Йылан, дейеү, батшалар,
Кеше затын эҙәрләп,
Тапҡан ерҙә берәмләп
Ашап башын үҫтереп,
Ҡайныһын ҡол иттереп,
Ил өҫтөндә түш киреп,
Кешеләрҙе буҫығытып,
Ҡан илатҡан осорҙа
Егет тә булып үҫтем мин.
Үлемде лә белмәнем,
Етемде лә күрмәнем,
Дейеү илде ҡаплағас,
Йылан күпте ялмағас,
Үлем күҙгә сағылғас,
"Миңә лә көн килер, тип;
Минең ҡулдан килмәһә,
Илгә бер ир тыуыр, тип;
Дейеүҙәр менән йыланға
Бер көн ҡыраң һалыр, тип,
Кешеләрҙең шул көндө
Шатлыҡ туйы булыр, тип,
Һыҡтап йөрәге һыҙған,
Ҡан илап күҙе тонған
Кешеләрем йылмайып,

Рәхәт һулыш алыр, тип,
Ерҙә байман ҡорор", - тип, -
Шуны өҙөлөп көттөм мин.
Үлемгә йән бирмәҫкә,
Туйҙан тороп ҡалмаҫҡа,
Йәншишмәнән эстем мин.
Үлем күп саҡ осраны,
Өҫкә ҡандар сәсрәне,
Үңәсемдән күп алды,
Боғаҙға бысаҡ күп һалды,
Ҡандарымды арҡытты,
Һөйәгемде ҡыйратты, -
Шунда ла буй бирмәнем,
"Йәнемде ал!" - тимәнем,
Йәнем бирмәй серәштем,
Үлем менән көрәштем,
Инде туйҙы күрҙем мин,
Шуға бында килдем мин,
Һеҙгә сәләм бирҙем мин;
Кешеләрҙең көләс йөҙөн
Күҙ алдымда күрҙем мин;
Кеше, кеше тигәндең
Батырлығын һиҙҙем мин.
Инде үлһәм дә, ҡайғым юҡ:
Ҡалҡып ятҡан ҙур юлың
Кешегә төйәк булырлыҡ;
Дейеүҙән өйгән тауҙарың
Кейеккә торлаҡ булырлыҡ,
Һәр ҡайһыны йәйерәп
Йопланып түл йәйерлек;
Быуын-быуын үрсешеп,
Бергә уйнап-көлөшөп,
Байман табып ерләшеп,
Үткәндәрен йырлашып,

Көн итерҙәй ил булып,
Торасағын белдем мин.
Егетем, батыр икәнһең,
Күҙ ҡарамдай һаналған
Илгә ҡашҡа икәнһен;
Быуын-быуын буйына
Маҡталырлыҡ икәнһең.
Ил ырыҫын табырға
Атаң һиңә ҡот биргән,
Әсәң һиңә һөт биргән;
Дошманға таш йөрәкле,
Дуҫыңа аш йөрәкле
Батыр итеп үҫтергән,
Тәү арыҫлан мендергән.
Яҡшылыҡҡа ынтылған
Йөҙө көндәй һылыуға,
Һыны тиңһеҙ һылыуға -
Һомайға тап булғанһың.
Утҡа ҡаршы ут булыр,
Һыуға ҡаршы һыу булыр,
Елгә ҡаршы тау булыр,
Яуға ҡаршы яу булыр
Аҡбуҙатҡа атланып,
Дейеүҙәргә яу асҡан;
Ерҙән диңгеҙ киптергән,
Ергә ырыҫ сәстергән,
Илгә байман килтергән
Һине ҡашҡа тип белдем,
Һинең алдыңа килдем.
Күбәләктәй йәнем бар,
Бер йотомдай ҡаным бар,
Әлберәгән тәнем бар;
Һөйәк-һаяҡ ҡыйралған,
Тик тарҡалмаҫ һыным бар,

Хəҙер уйым тарҡалды,
Йəшəр хəлем ҡалманы;
Үлем саҡырып ҡараным,
Буй бирергə уйланым.
"Йəншишмəнəн һыу эстең -
Миңə ҡаршы көс иттең,
Мəңге йəнең алалмам,
Һине үлек итəлмəм;
Көсөң бөтөр - ҡалырһың,
Үл(ə)алмай ҡаңғырырһың;
Тəнең сереп, ҡорт ашар,
Шунда ла һин үлмəçһең,
Һис донъянан китмəçһең,
Мине бушҡа көтөрһөң,
Алйып-ҡанғып бөтөрһəн", -
Тип, йəнемде алманы,
Үлем баҙнат ҡылманы.
Егет, һиңə килдем мин,
Килеп хəлем əйттем мин.
Ҡолаҡ һалһаң һүҙемə,
Əйтə торған һүҙем бар;
Илгə йола булырҙай,
Һынап белгəн заңым бар:
Донъяла мəңге ҡалам, тип,
Донъялай ғүмер һөрəм, тип,
Үлемгə буй бирмəçкə,
Уны бер заң итмəçкə
Йəншишмəнəн эсмəгеҙ,
Миндəй хурлыҡ күрмəгеҙ.
Донъя ул бер баҒ икəн,
Йəн эйəһе шул баҒта
Донъя быуынын һанаҒан,
Ҡайһы быуын аҡлаҒан,
Ҡайһы уны таплаҒан,

Төрлө төҫкә биҙәгән,
Бары - үҫемлек, гөл икән;
Беҙ Үлем тип һанаған,
Яуыз ул тип ҡараған -
Бағтың туҙған үҫмерен
Йәки көнө тулғанын
Сүпләп, бағты бушатҡан,
Унан донъя ташлатҡан
Бөтмәй торған йола икән.
Мәңге ҡалам тимәгеҙ,
Йәншишмәнән эсмәгеҙ.
Донъяла мәңге ҡалыр эш -
Донъяны матур төҙөгән,
Бағты мәңге биҙәгән -
Ул да булһа яҡшылыҡ.
Күккә лә осор - яҡшылыҡ,
Һыуға ла батмаҫ - яҡшылыҡ,
Утҡа ла янмаҫ - яҡшылыҡ,
Телдән дә төшмәҫ - яҡшылыҡ.
Бары эшкә баш булыр,
Үҙеңә лә, кешегә
Мәңге йәшәр аш булыр", -
Тигән һүҙен ишеткәс,
Бөтә серҙе анлағас,
Бар халыҡты эйәртеп,
Урал юлға сыҡҡан, ти,
Йәншишмәгә барған, ти,
Һыуын уртлап алған, ти;
Үҙе сапҡан юлына,
Дейеүҙән өйгән тауына
Һыуҙы шунда бөрккән, ти.
"Тау-урмандар йәшәрһен,
Мәңге үлмәҫ төҫ алһын,
Ҡошо һайрап маҡтаһын,

Халҡы йырлап хуплаһын,
Ерҙән ҡасҡан дошмандар
Бары күреп һоҡланһын,
Ил һөйөргә ил булып,
Ер һөйәргә баҒ булып,
Дошман күҙен ҡыҙҙырып,
Балҡып торор ер булһын!" -
Тигән һүҙен әйткән, ти.
Һыу күп һипкән еренән
Ҡарағай, шыршы үҫкән, ти,
Һыуыҡҡа төҫ ҡоймаҫлыҡ,
Эҫегә лә кипмәҫлек,
Ҡорт, мыр-мазар төшмәҫлек,
Яп(ы)рағы төрөлөп,
Беҙәнәктәй булған, ти,
Мәңге йәшел ҡалған, ти.
Шүлгән быны ишеткәс:
"Хәҙер мине яҡлаусы,
Кешене аранан сүпләүсе,
Бара-бара аҙ-маҙлап,
Донъянан юҡ ҡылыусы
Үлем тигән яу ҡалды,
Уға иркенлек булды, -
Миңә ярҙам итер ул,
Кешене тар-мар итер ул", -
Тиеп уйлап ҡыуанған,
Дейеү-йыланды йыйнаған,
Барыһына һөйләгән.
Уралға баш эймәҫкә,
Кешегә һыу бирмәҫкә
Бар дейеүгә ҡушҡан, ти.